*Зәки ӘЛИБАЕВ*

# Глназотоеваныширидоньяы

Йәне йәнсыҡҡан саҡта ла устарын ҡыҫып, урттарын тешләп, күҙҙәренән осҡон сәсә-сәсә, аҫау айғыр кеүек алға ынтылып, үҙ биләмәләренә, тоҡомдаштарына сарсалмай күҙ ташлап, сабырлыҡ сынйырын ҡоростан мәрйен кеүек үргән ҡатындарҙы беләм. Улар берәү генә түгел. Тарих биттәрен теткеләмәй, замандаштарыма баҡһам да, тап шундайҙар юҡ түгел. Уларҙың яҙмыштарына бағып, ҡай саҡ ирҙәр иңенә алмаған ауырлыҡтарҙы иңләп, ыһ та итмәй алға барыуҙары беҙҙең ғәҙәти күренешкә әйләнде буғай. Беҙ быны танырға ла онотоп, ир-уҙамандарҙың ихлас рәхмәтен дә әйтмәйбеҙ. Билде бишкә бөгөп заман йөгөн тартҡанда үҙебеҙҙән тыш эргә-тирәбеҙгә лә күҙ һалып, тилбererәк, аҙымынан осҡон сәсеп, юлсыларға йүнәлеш биргәндәргә лә иғтибарлыраҡ булайыҡ, тиеүем. Күтәргән йөгөнөң ауырлығын түгел, заман аҙымын, ҡай юҫыҡҡа хәрәкәтен, йә булмаһа Урал алтынына бәрәбәр башҡорт рухиәтенә нимә өҫтәлгәнлеген тойомлаһаҡ та хилаф булмаҫ.

Һүҙем Башҡортостандың Ш.Бабич премияһы лауреаты, филология фәндәре кандидаты, бай тарихлы "Башҡортостан ҡыҙы" журналының баш мөхәррире Гөлназ Ҡотоева хаҡында. Әлбиттә, шағирә ижады хаҡында заманында академик Ғайса Хөсәйенов, ҡәләмдәштәре Гөлсирә Ғиззәтуллина, Ғәбиҙулла Зарипов, Зөлфиә Ханнанова һәм Айһылыу Ғарифуллиналар һүҙ әйткәйнеләр.

Гөлназ Ҡотоева 1974 йылда Әбйәлил районы Ишҡол ауылында тыуған. Ауылында урта мәктәпте тамамлағас, БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетында уҡый. 1996 йылдан Башҡортостан "Китап" нәшриәтенең нәфис һәм балалар әҙәбиәте редакцияһында мөхәррир булып эшләй. 1999 йылда Г.Ҡотоева Сибай төбәк яҙыусылар ойошмаһына әҙәби консультант булып эшкә күсә. 2000 йылдан ойошманың етәксеһе итеп һайлана. Йәш ижадсыларға юл ярыу, уларҙы ойошма тирәһенә туплау, әҙәби саралар үткәреү уны оҫта ойоштороусы булараҡ та аса. 2002 йылда Өфөгә, "Ағиҙел" журналына өлкән мөхәррир булып күсә. Һуңынан шул уҡ журналда яуаплы сәркәтип булып эшләй. 2012 йылда ТЮРКСОЙ Халыҡ-ара журналистар премияһы лауреаты була. Башҡорт фольклоры буйынса диссертация яҡлай. 2013 йылдың аҙағында "Башҡортостан ҡыҙы" журналына баш мөхәррир итеп тәғәйенләнә. Гөлназ Ҡотоева — биш китап авторы, Башҡортостан яҙыусылар союзы ағзаһы. "Сәскә булып атайым", "Ай ҡапҡаһы", "Һағынырмын ямғыр елен", "Күңел томбойоғо", "Ҡырҡ сырағым" китаптарын уҡыусылар бик йылы ҡаршы алды. "Күңел томбойоғо" исемле шиғырҙар һәм поэмалар йыйынтығы дәүләт йәштәр премияһына лайыҡ булды. Шағирә проза өлкәһендә лә әүҙем эшләй, тәржемәгә лә ихлас тотона. Гөлназ шиғриәттә үҙ юлын тапҡан, йырлар моңон дөрөҫ көйләгән һәм, һүҙ сәнғәтенең иң тылсымлы төрөнөң серҙәрен сисә-сисә, үҙ уҡыусыһы менән бүлешә.

Шағирә Гөлназ Ҡотоева күңел түрендәге иң-иң илаһи хис-тойғоларын, замандаштың ҡабатланмаҫ һыҙаттарын һәм дәүерҙең һәр һулышын әсә йөрәге аша үткәреп, серле шиғри һандығына туплай ҙа, ихласланып беҙгә өләшә. Уларҙы тәҫләп түгел, ә берәмләп-берәмләп уҡый башлаһаң, ҡабатланмаҫ, күңелдәргә уйылып ҡалырҙай, тәрән фекерле лирик героиня менән осрашаһың. Юҡҡа ғынамы ни, шиғри системаларҙы структур анализлау ысулына нигеҙ һалыусы Ю.М.Лотман лирик геройҙы текста ап-асыҡ билдәләнгән фигура, индивидуаль яҙмыш, күңел торошоноң психологик сағылышын, үҙенсәлекле йөҙө һәм мәңгелекте иңләргә етерлек фекере булыуы мотлаҡ, тип билдәләй [1, 49]. Әҙәбиәт белгесе Ю.Н.Тынянов тарафынан 1921 йылда индерелгән "лирик герой" терминын хәҙер бигерәк ябайлаштырып, үтә бер ҡатлы автор кимәленә төшөргән осраҡтар ҙа юҡ түгел [2, 145].

Ә Гөлназдың лирик геройының хәрәкәтен, уйҙарының эволюцияһын тотоп асыр өсөн 11 табаҡҡа яҡын күләмле "Ҡырҡ сырағым" йыйынтығын ярайһы уҡ "ойпаларға" тура килде. Бушҡа түгел...

Тәү ҡарашҡа лирик геройҙы көслө наҙҙан ғына әүәләнгән фәрештәләй күрәһең:

Осорҙом уйҙарҙы, өрҙөм дә —
Аҡ мамыҡ туйында кинәнәм.
*("Бәпембә туйы")*

Унын өсөн тәбиғәттең сихри мәлдәре шиғри образды тилбер генә үҙе тарата:

Йондоҙ ҡойонғанын күҙәтәм дә
Таңдарын мин ысыҡ кисеп ҡайтам.
*("Тартыу көсө")*

Фәрештәнең ҡанаттары күктең хозурлығын ғына иңләмәй, ә анығ ерҙә хәрәкәт итә:

Һәр бер өйҙөң тәҙрәләре илап,
Ҡағылғандай минең ҡулдарға.

Оҙатҡандай сығып ҡыйғаҡ ҡыҙҙар,
Ҡул болғаған кеүек талдары...
*("Тартыу көсө")*

Лирик герой ҡанатлы булһа ла, унын барлыҡ көсө тыуған ерендә, наҙлы Ҡыҙылында. Шуға ла ул тағы ла көслөрәк һәм төҫлөрәк булһын өсөн, әленән-әле шул сығанаҡтарға манып ала.

Күҙен йомоп иҫләп алыуым да
Талған йәндәремә булыр дауа.
*("Тартыу көсө")*

Эйе, лирик геройҙың уйҙарына һоҡланыу һәм табыныу ғына түгел, донъяуи мотивтар ҙа инеп, йәндәрҙе өтөп ала. Ләкин автор социаль тормоштоң ваҡлыҡтарынан, ғәҙәтилектән һәм ҡатмарлы мөнәсәбәттәрҙән саҡ ҡына юғарыраҡ, үҙенсәлекле йүнәлештә хәрәкәт итә. Йәғни ул башҡалар күргәнде күрмәй түгел, ә шул мөнәсәбәттәргә икенсе яҡтан ҡарарға өндәй, өйрәтә. Герой "өҙөлгән муйынсыҡтар"ҙан күңел төшөнкөлөгөнә батмай, ә өҙөлгәнде ҡояш нурҙарына ялғап, йәндәргә йылылыҡ өлгәшә. Үткән ғүмерҙе баһалар өсөн хаттар яҙа, донъяның асылын асыу серҙәрен таба алһа ла, ҡулында — "китек ай". Ләкин был — йәндең яңғыҙлығы түгел, бөтөнлөк эҙләп Етегәнгә үрелеүе. Күңел кисерештәренең траекторияларын билдәләүе ауыр. Беҙ уйлаған һәм тойған ҡатламдар ғына аҙ кеүек. Шуға ла "Ҡояшыма", "Уйын уйым", "Ҡөтөү" шиғырҙарында был осошта лирик геройҙың талпыныуҙары асыҡ сағыла.

Һәр миҙгелдән, мәлдән көс алып;
Яңыртамын йәндә яҙ балҡышын,
Бөгөнгө көн нурын өҫтәйем дә, —
Ос, ос, әйҙә, тиеп, талпындыра, —
Күгем минең йәйғор төҫтәрендә.

Эйе, йәйғор төҫтәрендә. Шулай булмаһа, көслө герой хас Бабич шиғриәтендәгеләй:

Был — билдә.
Был — асҡыс
Йыһанға тераӆгән бер баҫҡыс, —

тип өндәшә алыр инеме?

Гөлназдың “Билдәләр” шиғырында ҡатын-ҡыҙҙың көсө суйын күңелде иретеп, Йыһан көсө менән үлсәнеп кенә ҡалмай, сиктәрҙе юҡҡа сығара. Көслө шиғыр. Тәү ҡарамаҡҡа үтә лә яҡлауға мохтаж лирик героиня:

Кәрәк ым.
Кәрәк наҙ,
Кәрәк яҙ...
Яҙмышҡа инаныу ҙа бер аҙ, —

тип һулҡылдаған һымаҡ.

Ә артабан:

Яҡлауға бойһоноу иретә,
Күңелде сорғота иреккә, —

тип өндәшә икән, быуаттар төпкөлөнән рухи аңыбыҙға һеңгән азатлыҡ көсәү символы тетрәндерә. Ябай лирик шиғырҙа ла эпик фекерләү, тәрәнлекте тойоу һәм аңлау ярылып ята. Шағирәнең йөрәге лә ошоно раҫлап тибә, Рәшит Назар менән бер ҡатарҙан хәрәкәт итә. Өс шағирҙың типологик уй-фекеренең хәрәкәте — башҡорттоң төпкө аң эшмәкәрлеге, милли поэзияның аҫыл бер бағанаһы. Ошо образ аша тарихи ысынбарлыҡҡа ла баға алабыҙ, бөгөнгөнө объектив баһаларға ынтылабыҙ, ә киләсәккә дөрөҫ йүнәлеш билдәләргә мөмкин. Был — табыш, шағирә!

“Күңелдең юҡтыр бер тынаһы” — тип өндәшә икән, шағирә йөрәге Урал йөрәге менән йәнәш тибәләр. Тәбиғәтте бар булмышы менән тойғандар ғына шулай өндәшә. Мөхәббәт лирикаһында Гөлназ Ҡотоеваның героиняһы ғазаптарҙан, һөйөү-шатлыҡтарҙан, осош-табыштарҙан азат түгел. Әйтерһең дә автор үҙенең иң нескә хис-тойғоларын сағылдыра ла, йөрәк һағыштарын һүҙ тылсымы, илаһи һүҙ ҡөҙрәте аша шиғри мәрйендәргә теҙә. Ер йөҙөндә Әҙәм һәм Һауа мөнәсәбәттәренән башланған ҡайнар хис-тойғолар Гөлназдың барлыҡ ҡатын-ҡыҙ булмышын, ҡояштың бар нурҙарын үҙендә туплаған һәм төнгө шәфәҡ кеүек серле, нәзәкәтле һәм сибәр образ булып балҡый.

Керпегеңә эленгән шул тамсы
Терелтерме ҡабат?
Аһ, ул ысыҡ түгел,
Ут тамсыһы —
Миңә тағы һабаҡ...

*(“Ғазап”)*

Кешенең һөйөү ҡөҙрәтен үлсәр бизмәндәр юҡ. Әммә уның күләм-дәүмәлдәрен ярһыу осҡонда, бер ҡараш та, йәшен йәшнәүе лә билдәләй. Шуға ла лирик героиня:

Юғалам донъянан
Ишемә иш булып
Яратып, —

тип әйтә икән, аҙаҡ:

Уйың булырмын мин ожмахыңда,
Уйым булырмын мин йәннәтеңдә,

— тип раçлап ҡуя. Мөхәббәт ул тәрән һыуҙың уртаһынан ғына тирбәлеп ағыу түгел, ә ярҙан-ярға бәрелеүҙәр менән дә әҙәмде һынай. Лирик героиняның һөйөүҙән бөрөләнгән саф гөлдәрен һалҡын ҡырау ҙа өтөп ала:

Хәтер биттәрен аҡтарып,
Һиңә балҡып баҡһам,
Һонолормы шул ҡулдарың,
Йондоҙ өмөт итеп?
Усымдағы минең Айҙың
Сите генә китек...

*(“Китек ай”)*

Автор поэтик образдың кинәйәһен традицион ысул менән бик йәтеш, тәрән мәғәнә аша асып һала:

Бер рәхәткә генә юлыҡтыр ҙа,
Ҡөнгә асылырға бир ҡанат.
Мин бит — бөрө,
Һин бар ҡылған бер сер,
Һинең хыялыңдан аманат.

*(“Ҡатын”)*

Наҙға, һөйөүгә сарсау тағы ла сабырыраҡ итә бара һымаҡ:

Үткәнемдән төңөлһәм дә,
Үкенеү, үпкә лә юҡ.
Үткәнем мине үçтергән,
Үçендергән шулай уҡ.

*(“Төңөлөү”)*

Гөлназ үҙенсәлекле башҡорт өнөнөң ассонансын ҡулланып, бер моң аша герой характерын тулыландыра.

Әгәр китһәм ҡабалмай, —
Миңә өлгөргән емеште,
Мин уртлар һыуҙы,
Беләм:
Шуға,
Үрҙәрҙе артылып
Бәхеткә табан еләм, —

тип фекер ебен нығыта “Бәхеткә еләм” шиғырында. Мөхәббәт лирикаһындағы өмөт, яҡты ҡараш һәм серлелек шағирға күңел ауаздарын аңларға ярҙам итә. Лирик героиня бар тарафтан наҙ табып, донъяның үҙен дә шуға сорнарға ынтыла:

Тамам ялҡкас ҡоролоҡтан,
Ҡоролоҡтан,
Бер орлоҡтан
Шытып сыға шатлыҡ.

*(“Ҡыуаныс”)*

Шағирә һоро болоттар араһынан да таçма ҡояш нурҙарын күреү һәләтенә эйә. Шуға ла уның фекерләү ҡеүәһе йыһан киңлектәрен байҡай:

Сағыламы төнгө Ай-батмуста
Минең моңло йөҙөм?

Ҡатын-ҡыҙ — матурлыҡтың үҙе. Ул донъяның барса яғын теүәл, гармониялы һәм нәзәкәтле итеп кенә ҡалмай, үҙе лә илаһи зат юғарылығына күтәрелә.

Йөрәгемде йылытырлыҡ
Бармы берәй тылсымлы көс?

*(“Осар төш”)*

Ҡеше — моң ул,
Изгелектең
Нуры кеше үҙе.
Инҡар итәм, кеше үлә
Серей, тигән һүҙҙе, —

*(“Мәңгелек”)*

тип мәңгелекте нарыҡлай шағирә. Риторик һорауҙар менән генә ҡотолмай, ә сал ирҙәр һымаҡ бәхәс ҡора. Ә “Дауылдан һуң”, “Яратам”, “Сер”, “Осҡон” шиғырҙарында тәбиғәттең бөтөнлөгө, теүәллеге аша күңел донъяһының юғарылығын хистәр балҡышында бирә. Лирик геройҙың осҡонға тиң ҡиәфәте бар булмышты яулап ала:

Минең өсөн йәндәй йән булырһың,
Була алмаһың тик битараф.

*(“Осҡон”)*

Ә һин үҙең беләһеңме
Утҡа ҡапҡаныңды?

*(“Беләһеңме”)*

Ҡатын-ҡыҙ заты һөйөүҙең көсөн, төҫөн, бәҫен юғары баһалай. “Яза”, “Асылыу”, “Осош”, “Яҡтылыҡ”, “Һағыныу”, “Ауаз”, “Минең биләмә” кеүек шиғырҙарында лирик героиняның һөйөү сиктәрен билдәләү ауыр. Бәлки, кәрәк тә түгелдер. Гөлназдың “Һинең хатаң” тигән шиғыры йәнәш рифмаға ҡоролоп, йырлап тора. “Һәр юлдан һин үҙең күренәң!” — рефрены эске ритмиканы ғына нығытмай, ә бер моң барлыҡҡа килтерә.

Г.Ҡотоева шиғриәтендә жанрҙың өр-яңы формаһы, төрлө алымдар ҙа йыш ҡулланыла. Унын нигеҙендә ябай һүҙ уйнатыу түгел, ә эҙләнеүҙәр ята.

Мине таш иткән йәнеңә
Наҙҙар инселәй башлай, —

тип, автор “Уйын” шиғырында контрастлы асыш аша тойғолар сыуалышын бик асыҡ бирә. “Әйтеш”, “Бараһыңмы, алып барам” шиғырҙарында диалог формаһы бик йәтеш. Шағирәнең “Бәргеләнеү”ен тетрәнмәйсә уҡып булмай! Лирик героиняның тормош асылдарын асыу өсөн йән өшөткөс ғазап күперҙәре аша үтеүе фарыз.

Үҙ-үҙемде ул яҡҡа ла,
Был яҡҡа ла тартҡылап,
Ағастағы тубырсыҡтай
Ергә ҡолап төштөм лап.

*(“Бәргеләнеү”)*

Башҡорт шиғриәтенең бай традициялары, бөйөк психолог Д.Ҡарнеги ҡараштары менән уҡмашып, оло фекер бөтөнлөгөн хасил иткән әҫәрҙә. “Ҡисер”, “Ым”, “Ыу”, “Һағышлы моң”, “Ишһеҙ алҡа”, “Алыҫлыҡ” һәм башҡа әҫәрҙәрҙең нигеҙендә ҡапма-ҡаршылыҡлы уйҙар бәрелешендә барлыҡҡа килгән фекер ята. “Сыңрап һүнгән миҙгел”, “япраҡ яуындары”, “яҙмыш тигән яман ҡылыс”, “көҙ хат яҙған, ана, япраҡтарға”, “күңел — йүгәнһеҙ ат”, “яҙғы көн һайрай тупһала”, “елеккә үткән был ҡыш”, “тышта тамсы тәгәрәй”, “тәҙрә битенән бейей ямғыр” кеүек поэтик образдарға шағирәнең һәр күренешкә, тормошҡа рәссамдарса

ҡарашы, төҫтәр палитраһының сағыулығы ярылып ята. “Дәрт” менән “Елғыуар” шиғырҙарында кеше ғазаптарын, тәрән кисерештәрен күрһәтеүсе оло картина хасил була. Ҡеше фани донъяларға бәхетле булыр өсөн килгән. Ләкин бәхет асҡыстары ҡайҙа икәнлеген бер кем дә белмәй. Гөлназдың шиғриәтендә лә был образ төрлө сүрәтендә күҙ алдына баҫа.

Ел артынан ҡыуып ҡараным мин, —
Мин бәхетле булып ҡараным...

Йәки:

Ялтырар, тип, бәхет
Һүренке нурҙарҙа,
Бәләкәй генәһен
Мин әҙер —
Ҙурларға!

Бәхет көтөп йәшәгәндә генә
Был донъянан танһыҡтары ҡанмай.

Лирик герой өсөн бәхет Ҡаф тау артында түгел, ә күңелгә сиртер ҡылда, монда, сәскә сыңында.

Бәхет үҙе миңә
Аса кеүек тажын.

*(“Һиңә мин кем?”)*

Йәки:

Мин аңланым хәҙер
Бәхеттең дә
Талға ҡунған ҡошҡа тиңлеген, —

*(“Һыу юлы”)*

тип өндәшә икән, тормошҡа фәлсәфәүи ҡарашлы героиняның тәрән хис-тойғоларынан тыуған фекерен аңларға була. “Хыял” шиғырында өндәр байрамы, моң өҫтөнлөк итә. Һүҙҙәр үҙ-ара рифмалашып, йырлашып тора.

Гөлназ Ҡотоева ижадында “Ҡырҡ сырағым” поэмаһы айырым урын биләй. Шағирә әҫәрен:

Ҡырҡ сырағым дөрләп яна
Етеп килгәндә ҡырҡым, —

тип башлап ебәрә. Композицион яҡтан йыйнаҡ, тығыҙ фекер динамикаһына нигеҙләнгән лиро-эпик әҫәр. Биш бүлектән торған поэма лирик геройҙың юғалтыуы — әсәһе гүр эйәһе булыуҙан башлана. Оло ҡайғынан һуң “Ҡояшы ҡолап төшкән” ҡатын-ҡыҙҙың өр-яңынан көс туплап, яңыса балҡыуы һүрәтләнә. Күңел ғазаптары, һыҙланыуҙары поэманың нигеҙен тәшкил итә.

“Берҙәмлектә — көсөбөҙ” поэмаһы форма һәм йөкмәткеһе менән алдағыһынан айырыла. Әҫәр тарих сәхифәләрен барлап ҡына ҡалмай, ә Салауат, Ҡәнзәфәр, Юлай, Әминә, сәсән һәм батырҙың әсәһе образдары тергеҙелә. Үҙенсәлекле диалогҡа ҡоролған поэма эпилог менән тамамлана. Һәр образ тулы, тере һәм бар бөтөнлөгөндә сағылыш тапҡан.

“Сыраҡ” поэмаһында ла алдағы әҫәрҙәренең стиле һаҡлана. Лирик героиня “Ни мәңгелек Ерҙә?” — тип уҡыусыны бәхәскә саҡыра ла сәйәхәткә ҡуҙғала. Автор бик ҡулай алым ҡуллана: ваҡыт һым арауыҡты бер фокусҡа туплап, героиняны хәрәкәтләндерә. Донъя асылдарын асыу — кешенең аңдарын биләгән, зиһенен яулаған, яуаптар таптырған оло юл. Сәфәре лә ябай түгел — әсә ҡарынынан алып күктәргә тиклем. Поэма геройының сәйәхәтенә ҡушылып,

донъя гиҙәһең, тарих төпкөлдәренә төшәһең. Ҙур булмаған 7 бүлектә һәм эпилогта шағирәнең тәрән фекерҙәрен иңләйһең.

Был донъяның осҡондары шулай
Тетрәнеүҙән генә тора һымаҡ.

Шағирә үҙенең кисерештәрен эпик киңлектә лә йәйелдереп ҡуя. Быға бигерәк тә башҡорт һүҙ сәнғәтенең бай традициялары, ҡобайыр стиле ярҙам итә. Лиро-эпик жанрҙың бай мөмкинлектәрен автор оҫта файҙалана.

Г. Ҡотоева форма төрлөлөгөнә лә, шиғри строфаларының яңыса яңғырауына ла ирешә.

Шиғыр килә шығыр-шығыр,
Йүгерәм дә ҡаршы сығып, —

тигән юлдарҙа аллитерация өҫтөнлөк итһә, ә:

Аҡылымдан яҙам мәллә,
Аһым ҡылдан
Арҡан үрә,
Асылыңдан
Аҫылынһам?! —

тип ассонанстың матур өлгөһөн бирә.

Форма яңылығын биргән эске, әйләнмәле йәки йәнәш рифмалар ҙа шағирәнең ҙур табышы. Ул һүҙҙәрҙе күңел ҡуҙҙарында уйнатып, аҫылташтар йәки мәрйен итеп теҙеп ҡуя ала.

Тышта тоноҡ, мөлдөрәп ай ҡарай
Сер ҡапҡасы зәңгәр тәҙрәнән:
Усаҡ миңә ялҡын теле менән
Һуңғы шиғырҙарын һөйләгән.

*("Хәтерләт!")*

Замандың күҙенә тура ҡарап, дәүер ваҡиғаларын хис-тойғолар күпере аша үткәреп, быуаттарҙан килгән традицияларҙы иҫләп кенә түгел, ә үҫтереп, тормош сыңын, тәбиғәт моңон, йыһан йырын ижад итә замандаш.

Шағир ҡулын кире һуҡма:
Унда алтын асҡыс!
Күктең етенсе ҡатына
Терәгән ул баҫҡыс.

*("Шағир")*

Башҡорт теле минең, аҫылым
Балҡып ҡына китер асылым.

*("Башҡорт теле")*

Мәңгелектең ауазы булып яңғыраған алтын асҡыстай башҡорт теле, башҡорт һүҙе менән Йыһан сиктәрен шиғри моң менән биҙәй икән шағирә, булмышына — көс-ҡеүәт! Юғары баҫҡыстарҙа ла һинең шиғырың шишмә булып атылып, халҡыбыҙҙың рухи донъяһына сафлыҡ ҡына бөркһөн!

**Әҙәбиәт:**


1. *Лотман Ю.М.* О поэтах и поэзии. — С.-Петербург: "Искусство — СПБ", 2011.
2. *Тынянов Ю.* Проблема стихотворного языка. — Л., 1924.